*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# ТАМЫРҘАРЫ — ИЛЕШТӘ





Донъялағы иң абруйлы «Евровидение — 2000» конкурсында Рәсәй вәкиле булып иң йәш, иң серле йырсыларҙың береһе Алһыу Сафина ҡатнашты һәм икенсе урынды яуланы. 16 йәшлек Алһыу (әйткәндәй, 2000 йылдың 27 июнендә Өфөгә килгәндә уға 17 йәш тулды) «Соло» йыры менән бығаса мәшһүр Алла Пугачева менән Филипп Киркоров та өлгәшә алмаған уңышҡа иреште. Стокгольм сәхнәһенән яңғыраған был моңло йыр хәҙер Рәсәйҙә, Башҡортостанда ғына түгел, бөтә донъяла билдәле.

Алһыуҙың уңышына Башҡортостан халҡы ла бик шатланды, сөнки уның тамырҙары Илеш районының Уяндыҡ ауылына барып тоташа. Атаһы, «ЛУКойл» компанияһының вице-президенты Рәлиф Сафин ошонда тыуып үҫкән. Әсәһе Разия ханым сығышы менән Татарстандың Бөгөлмә тарафтарынан. Алһыу ҙа Бөгөлмә ҡалаһында тыуған, әммә бәләкәйҙән һыуыҡтарҙа сынығып, Себер яҡтарында үҫкән. Бер аҙ Мәскәүҙә лә йәшәгән. Ә бына 9 йәше тулғас ғаиләләре Лондонға күсә. Ошонда колледжда уҡығанда асыла ла инде Алһыуҙың таланты. Бөтә донъяға билдәле «Universal Music» компанияһы, йәш йырсының талантын тойомлап, уның менән контракт төҙөй. Күп тә үтмәй, Алһыу поп-музыка өлкәһендә ҙур еңеүгә өлгәшә.

Әле Алһыу архитектура дизайны колледжында белем ала, уны бер йылдан тамамлаясаҡ. Ағаһы Марат та Лондонда банкирға уҡый. Уҙған йыл өйләнгән, туйҙарын Илештә лә үткәргәндәр. Ҡустыһы Ренард әле бәләкәй.

Алһыуҙың музыкаль һәләте бәләкәйҙән, дөрөҫөн әйткәндә, мираҫ булып күсеп килә. Атаһы баянда оҫта уйнай, матур йырлай. Шулай ҙа әлегәсә Сафиндарҙа музыкант, йырсы булыусылар юҡ. Алһыу иң беренсеһе һәм иң уңышлыһы. Тырыш, маҡсатҡа

ынтылышлы булыуы, матур тауышы, инглиз телен яҡшы белеүе уға донъя күләмендә танылыу яуларға булышлыҡ иткәндер, моғайын.

Өфөлә үткән шоу-тамашала Алһыу күберәк музыкаль директоры Вадим Байков һәм композитор Александр Шевченко яҙған йырҙарҙы башҡарҙы. Үҙенең дә йырҙар яҙыуы билдәле. Мәҫәлән, «Фәрештә» тигән йырҙың көйөн дә, шиғырын да үҙе яҙған. Тимәк, киләсәктә Алһыуҙың беҙҙе өр-яңы йырҙар яҙып, йырлап ҡыуандыраһы бар.

Танылған йырсы булып өлгөрһә лә тыйнаҡ һәм баҫалҡы Алһыу, әммә ғорур. Уның мосолман ҡыҙы булыуы сәхнәлә үҙен тотоуында ла асыҡ күренә. Алһыу үҙе әйтмешләй, «мин суфый ҙа, Алла ла түгел, мин ябай, тыныс кеше».

Өфөгә килгәнсе ул Украина, Белоруссия, Балтик буйы, Санкт-Петербург тарафтарында, Татарстанда уңышлы сығыш яһаған. Ҡазан ҡалаһында Алһыу Сафинаға «Татарстандың атҡаҙанған артисткаһы» тигән маҡтаулы исем дә биргәндәр.

Өфөләге сығышы айырыуса уңышлы үтте Алһыуҙың. Әле концерт башланырға байтаҡ ваҡыт булыуға ҡарамаҫтан, Ленин исемендәге майҙан халыҡ менән шығырым тулы ине, хатта йәмәғәт транспортын туҡтатырға тура килде. Тамашаға Башҡортостандың премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов, уның урынбаҫары Хәләф Ишморатовтың, башҡа рәсми вәкилдәрҙең килеүе уның абруйын тағы ла арттырҙы. Ә бына Башҡортостан хөкүмәте башлығының урынбаҫары Хәләф Ишморатов, сәхнәгә сығып, Алһыуға нағышлап сигелгән матур башҡорт халыҡ милли кейемен бүләк иткәс, ҡыҙ, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡоловтың моңло ҡурайына ҡушылып, «Аҡ шишмә» йырын башҡарып ҡыуандырҙы. Уға был йырҙы өйрәнеүҙә Башҡортостандың халыҡ артисы Иҙрис Ғәзиев ярҙам иткән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тыуған ерҙән ситтә үҫкәнлектән, рус һәм инглиз телен яҡшы белгән Алһыу туған телендә аралаша алмаған. Әммә, продюсеры Валерий Белоцерковский раҫлауынса, «киләсәктә уның репертуарында туған телендәге йырҙар ҙа байтаҡ урын биләйәсәк». Алһыуҙың йырҙарын яҙҙырыусы кешеләр күберәк инглиз йырҙарына өҫтөнлөк бирә. «Шулай ҙа, ҡайҙа ғына сығыш яһамаһын, ул Рәсәй йырсыһы булып ҡаласаҡ», — тип билдәләне В.Белоцерковский.

Инглиз телен яҡшы белеү һәйбәт, әлбиттә. Әммә Алһыу рус һәм татар телдәрен яҡшы белеүҙе үҙенең бурысы тип иҫәпләй.

Тағы бер нәмә ҡыуандырҙы тамашасыларҙы: Алһыу бөтә йырҙарын да бар күңелен биреп, ысын йөрәктән башҡарҙы, ҡайһы берәүҙәр кеүек ауыҙ асып тороп ҡына «йырламаны», кереһенсә, фонограмманың эҫәре лә булманы.

Әле Алһыу даими рәүештә профессиональ белемен камиллаштырыу өҫтөндә эшләй —хореография һәм йыр дәрестәре ала, колледжда ла тырышып уҡый. Рәсәйҙә мәктәптә уҡыған өс йылды йәш йырсы аҙ хәтерләй. Дуҫтары ла күберәк Англияла. Киләсәктә Алһыу талантлы йырсылары менән дан тотҡан, иң ҡеүәтле поп-держава һаналған Американы «яуларға» ниәтләй. Алһыуҙың Иҙел буйы ҡалалары буйлап гастролгә йыйыныуы бик оҡшаны.

Тыуған яғы Бөгөлмәлә лә йәш йырсы бушлай концерт күрһәтте. Халыҡ диңгеҙ булып ағылды был тамашаға. Өфөләге шоуҙан һуң да Алһыу өләсәһе менән олатаһы янына — Уяндыҡҡа юл алды. Хәлиҙә эбей менән Рәфил бабайҙың үҙен көткәнен аңлап тора. Ни тиһәң дә Башҡортостан, Уяндыҡ күңеленә үтә яҡын, ошонда күңелендә дәрт-дарман өҫтәлә.

Концерттан һуң уҙғарылған матбуғат конференцияларында Алһыу үҙен ышаныслы ла, иркен дә, баҫалҡы ла тота. Һәр журналистың һорауына тыйнаҡ һәм ихлас яуап бирә, йөҙөнән йылмайыу китмәй.

— Өфөнө тыуған ҡалам кеүек күрәм, — ти йырсы, — сөнки атайым ошонда уҡыған. Мин дә беренсе тапҡыр ғына килмәйем бында. Илеш районында йәшәгән олатайым менән өләсәйем янына йыл һайыл ҡайтып йөрөйбөҙ. Ошо күркәм төбәккә тамырҙарым килеп тоташҡан булыуы менән сикһеҙ ғорурланам.

Һомғол кәүҙәле, тәү ҡараштан ғашиҡ итерлек һылыу Алһыу сәстәрен йыйнаҡ итеп артҡа тараған, ҡарашында, үҙ-үҙен тотошонда бер ниндәй «йондоҙ ауырыуы» һиҙелмәй.

Хоҙай Тәғәлә Алһыуға иҫ киткес талант биргән. Әле ул сәнғәт киңлегендә тәүге уңышлы аҙымдар яһаны. Бәхет йондоҙҙары юлдаш булһын һиңә, Алһыу! Киләсәктә лә шулай дауам итһен.